# «Йыйын»

*Маҡсат:* Йыйын йолаһын пропагандалау һәм тергеҙеү. Уҡыусыларҙа халыҡ ауыҙ- тел ижадына, тарихына, мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләү, уҡыусыларҙың һәләтен үҫтереү, асыу. Китапхана, ата- әсәләрҙең, йәмғиәтселектең балаларҙы тәрбиәләүҙәге бәйләнеште нығытыу.

*Йыһазландырыу:* Тирмә ҡороу, тирмә янына һике эшләү. Боронғо һөлгө, таҫтамалдарға сигелгән әйберҙәр, күргәзмә ойоштороу.

*Плакаттар:* "Йыйын күрке- сәсәндәр, ҡурайсылар, йырсылар", "Йыйында һөнәрлеләр күрһәтәләр һөнәрен, һөнәреһеҙҙәр күрһәтәләр үҙҙәрен", "Халыҡ ҙур ул, көслө ул, дәртле ул, моңло ул, шағир ул, әҙип ул".*(Ғ. Туҡай)*

*("Һабантуй" көйө яңғырай)*

*Хужабикә:* Йә, уландар, балалар әҙерһегеҙме? Башлайыҡ, халыҡ йыйылған бит!

*Егет, ҡыҙ:* Әҙербеҙ, әҙербеҙ!

*Хужабикә:* Әссәләмәғәләйкүм, хөрмәтле ҡунаҡтар! Һеҙҙе беҙҙең үҙәк китапханаһына ҡунаҡҡа йыйынға килеүегеҙгә бик шатмын! Йыйынды башлайбыҙ! Изге сәғәттә, әйҙәгеҙ балалар!

*Егет:* Ҡәҙерле дуҫтар! Хөрмәтле ҡунаҡтар! Беҙ төп культура ағартыу усағы булып торған Федоровка район үҙәк китапханаһына йыйынға йыйылдыҡ.

*Ҡыҙ:* Ата- олатайҙарҙан ҡалған изге йола- йыйын йыйып, халыҡ уйнатыу. Мәрген һүҙ

әйтешеп тарих һөйләп, уйнап- бейеп, күңел йыуатыу.

*Егет:* Беҙҙә йыйын, әйҙә йыйын!

Һүҙ уйнатып күңел асырға
Йырҙар йырлап, бейей-бейей
Тыпырлатып китереп баҫырға.

*Уҡытыусы:* Башҡорт халҡында йыйын йолаһы бик боронғо күренеш. Халыҡ йолаларының күрке- йыйын, йыйын күрке- сәсәндәр, ҡурайсылар, йырсылар тип тиккә генә әйтмәгәндәр. Йыйын гәҙәттә, һүҙ- моң оҫталары ярышынан башланған. Оҫта ҡурайсылар, йырсылар асыҡланған. Мәргәндәр, көрәшселәр көс һынашҡан, етеҙҙәр йүгерешкән. Ҡыҫҡаһы, шағир әйтмешләй, йыйында һөнәрлеләр һөнәрен күрһәтә, һөнәрһеҙҙәр үҙҙәрен күрһәтә. Йыйындың хужаһы булып йор тәбиғәтле, абруйлы йыйын йолаларын яҡшы белгән кеше йөрөй. Йыйын ике көн, хатта унан да оҙағыраҡ барған. Йыйын йолаһы тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булған. Йыйынға халыҡ йыйыр өсөн сапҡынсылар ебәрҙек. Рәхим итегеҙ, сәсәндәр тирмәһенә.*(магнитофондан "Урал-тау" ҡобайырын тыңлай).*

Башҡортостан борон- борондан сәсәндәре менән дан тотҡан. Беҙ ҙә балалар менән ҡобайыр әйтешеп алайыҡ әле.

*Уҡытыусы:* Балалар, бер тигәс тә ни яҡшы?

*Балалар:* Телеңде белеү яҡшы *(баш бармаҡты күрһәтеү)*

*Уҡытыусы:* Ике тигәс тә ни яман?

*Балалар:* Насар уҡыу бик яман *(баш һелкетеү)*

*Таня:* Минең исемем Таня, фамилиям Бурчак. Мин Федоровка районының Федоровка ауылында йәшәйем. 1-се һанлы мәктәптә, 4-се синыфта уҡыйым. Һеҙгә башҡортса йыр йырлап күрһәтәм.

*Фуат:* Мин- Фуат, фамилиям Щукюров. Башҡорт телен өсөнсө йыл өйрәнәм. Башҡорт теле һәм азербайджан теле бик оҡшаш, шуға башҡорт теле миңә оҡшай. Мин дә һеҙгә башҡортса йырлап күрһәтәм.

*Маша Кадушечкина, Эльвина Исхакова башҡарыуында "Любизники- любизар"йыры.*

*Маша:* Мин 3-сө синыфта уҡыйым. Исемем- Маша, фамилиям- Кадушечкина. Һеҙгә "Любизар" йырын башҡарам.

*Уҡытыусы:* Уның тарихы бик ҡыҙыҡлы. Французлар менән һуғышта башҡорттарҙы маҡтап, Кутузов: "Молодцы, любезнейшие башкирцы"- тигән. Шуға бағышлап сығарған.

Костригина Ксюша "Башҡорт телендә һөйләшәм" тигән йырын башҡара.

Никифоров Дима "Башҡортостан, Гөлбостан" йырын йырлап- бейеп күрһәтә.

*Хужабикә:* Бигерәк матур йырланығыҙ! Һай, уңғандар, рәхмәт! *(бүләктәр тарата).*

Йырсылар бәйгеһе тамам.!

*Уҡытыусы:* Бына, һеҙ уҡыусылар, тарихи йырҙарҙы, йола йырҙарын ишеттегеҙ! Улар йырҙың тарихын да беләләр икән. Йырҙар ата- бабаларыбыҙҙың иң ҡиммәтле һәм ҡәҙерле мирастыр.

*Егет:* Халыҡтың йыры бар ерҙә бейеүе лә булған.

*Уҡытыусы:* Өс тигәс тә ни яҡшы?
*Балалар:* Дуҫың булыу бик яҡшы
*Уҡытыусы:* Дүрт тигәс тә ни яман?
*Балалар:* Бәләкәйҙәрҙе йәберләһәң шул яман *(бармаҡ янау)*
*Уҡытыусы:* Биш тигәс тә ни яҡшы?
*Балалар*: Дуҫтар менән татыу йәшәү бик яҡшы *(үҙ- ара ҡулды ҡулға тотоп, баш осона күтәреү)*
*Хужабикә:* Һай, афарин, балалар, рәхмәт һеҙгә. Башҡорт телендә матур итеп һөйләп күрһәттегеҙ! *(ҡунаҡтарҙың сығышы)*
*Егет:* Уралымдың түрендә
Башҡорт тигән илем бар
Башҡортомдоң сәсән иле бар.
Сәсәнемдең үткер теле бар
Теле барҙың ғына иле бар.
*Ҡыҙ:* Башҡорт иле бейек- бейек тауҙарға ла, урман- һыуҙарға ла, гөл баҡсаһылай үҙәндәргә лә бай. Уның йыры ла таштан ташҡа һикереп уйнап ағыусы тау йылғаһындай шаян да, күңелсәк тә. *(Хор менән "Башҡортостан гөлбостан" тигән йырҙы йырлау.)* Рәхим итеп, башҡорт халыҡ йыры "Башҡортостан гөлбостан"ды тыңлағыҙ.
*Хужабикә*: Йәмәғәт! Балалар, йырсылар бәйгеһен башлап та ебәрҙе. Бәйгелә ҡатнашырға теләүселәр түңәрәккә рәхим итегеҙ! Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, ҡунаҡтар, балалар, ҡыйыуыраҡ. *(ҡунаҡтар йыр йырлайҙар, үҙҙәре менән таныштыралар).*
*Таня менән Фуат "Их, Өфө ҡалаһы" тигән йырҙы йырлайҙар.*

Баҫ, баҫ, баҫ әле
Һығылһын иҙәндәре
Һинән оҫта бейегәнде
Юҡ әле күргәндәре.

*Ҡыҙ:* Бейеүсенең итәге
Бейей- бейей ҡыҫҡара
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ
Бейей- бейей оҫтара.

*Хужабикә:* Йәмәғәт! Бейеүселәр бәйгеһен башлайбыҙ! Әйҙәгеҙ, бейеүселәр, бәйгегә рәхим итегеҙ! Ҡыйыуыраҡ булығыҙ, бейеүсе бейей, бейей оҫтара!

*1. Рима менән Рита бейейҙәр.*

*Уҡытыусы:* Мин Федоровка мәктәбендә башҡорт телен уҡытам. Беҙ дәрестә башҡорт милли ашы- бишбармаҡ тураһында һөйләшәбеҙ. Мин һеҙгә "Бишбармаҡ" бейеүен бейейем.

*(уҡытыусы бейеү башҡара).*

*"Замечательная" таҡмаҡ көйөнә таҡмаҡ әйтешәләр.*

1. Бейер ул, бейей ул
Бейер өсөн килгән ул
Уйнап- көлөп күңелдәрен
Асыр өсөн килгән ул.

2. Бейе әле, бейе әле
Аяҡтарың талмаһын
Йәш сағыңда уйна ла көл
Үкенескә ҡалмаһын.

3. Әйҙә, әйҙә, ҡатыраҡ баҫ
Бейегәндәр күрһендәр
Баҫҡан ерҙә ут сығара

Беҙҙең йәштәр тиһендәр.

4. Ағиҙел күперҙәре
Күпер бағаналары
Улар күңелдәре менән
Бейеүсе балалары.

5. Баҫ, баҫ, баҫ әле
Иҙәне һынмаҫ әле
Һынһа ямарҙар әле лә
Китапхана бай әле.

6. Әйҙә баҫайыҡ әле
Бергә баҫайыҡ әле
Бейейек тә, йырлайыҡ та
Күңел асайыҡ әле.

*(магнитофондан бейеү көйҙәре яңғырай, парлап бейеү, наказ уйнау)*
*Хужабикә*: Афарин, рәхмәт барығыҙға ла! Бейеүселәр бәйгеһе тамам! Күмәк бейеүҙәргә рәхим итегеҙ! *(күмәкләшеп бейеү)*
*Уҡытыусы:* Беҙҙең Федоровка үҙәк китапханаһында беренсе тапҡыр башҡорт, татар йыйыны үтте. Һеҙгә оҡшанымы? Йыйындарҙы үткәреү йолаһын тергеҙеү һәм киләсәктә үткәреү беҙҙең өҫтә.
*Егет:* Тыңлағыҙ, һеҙ йәмәғәт!
Боронғоларҙан аманат!
*Ҡыҙ:* Онотмағыҙ бабаларҙың
Тарихын һәм ижадын
Йолаһын һәм йырҙарын
*Егет:* Уға ҡылһағыҙ хыянат
Һеҙгә булыр аманат!
*Ҡыҙ:* Ҡәҙерле дуҫтар!
*Егет:* Хөрмәтле ҡунаҡтар осрашҡанға ҡәҙәр һау булығыҙ!

*Хужабикә:* Донъялар имен булһын
Йыйындар гөрләп торһон,
Тағы осрашырға яҙһын,
Хушығыҙ!
*Бөтәһе:* Хушығыҙ!
*(йыйындан һуң сәй эсеү, уйындар уйнау дауам итте),*